БАШКИРСКИЙ ЯЗЫК И ЛИТЕРАТУРА В УСЛОВИЯХ ГЛОБАЛИЗАЦИИ И ПОЛИЭТНИЧЕСКОЙ СРЕДЫ: ОПЫТ И ПЕРСПЕКТИВЫ

ISBN 978-5-91608-181-7 С. 405–408

https://doi.org/10.31833/conf_ihll2019.077

УДК 811.512.141’28

**Г. Ғ.Шәмсетдинова**

*Ордена Знак Почета Институт истории, языка и литературы УФИЦ РАН*
*проспект Октября, 71, Уфа, 450054, Россия*
*E-mail: moon07@yandex.ru*

# БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ЭПОСЫ «ҠУҘЫЙКҮРПӘС МЕНӘН МАЯНҺЫЛЫУ»ҘЫҢ 1973 ЙЫЛДА БЕЛОРЕТ РАЙОНЫ МӘХМҮТ АУЫЛЫНДА ЯҘЫП АЛЫНҒАН БЕР ВАРИАНТЫ ТУРАҺЫНДА (БАШҠОРТ ТЕЛЕНЕҢ ФОЛЬКЛОР КОРПУСЫ МАТЕРИАЛДАРЫ НИГЕҘЕНДӘ)

Статья посвящена анализу и выявлению отличительных моментов одного из вариантов башкирского народного эпоса «Кузыйкурпес и Маянхылыу», записанного ученицей 8 класса. Приведенные примеры свидетельствуют о значимости данного варианта и необходимости введения его в научный оборот. В целях наиболее полного представления содержания произведения, в статье дается полный текст варианта сказания о Кузыйкурпясе и Маянхылу.

*Ключевые слова*: башкирский язык, фольклор, эпос, эпическое произведение, разговорная речь, запись, Кузыйкурпес и Маянхылыу.

«Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» башҡорт халыҡ эпосын йыйыу һәм өйрәнеүҙең оҙайлы ғына тарихы бар. Эпосты беренсе мәртәбә 1812 йылда урыҫ телендә «Куз-Курпяч, башкирская повесть, писанная на башкирском языке одним курайчем и переведенная на российский в долинах гор Рифейских, 1809 года» [Беляев, 1812] исеме аҫтында Ҡазанда баҫтырыусы – Тимофей Беляев.

Башҡорт эпос белгесе М.М. Сәғитов «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» әҫәре тураһында: «Варианттарҙың барыһының да нигеҙе, төп сюжеты бер булыуға ҡарамаҫтан, улар әҫәрҙең тамамланышы, ҡайһы бер мотивтары, эпизодтары буйынса ике версияға бүленә», – тип яҙа [Сәғитов, 1973, 11]. Башҡорт фольклористикаһында был фекер хуплау тапты һәм әле лә «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» эпосының ике версияһы таныла. Ғалимдың раҫлауынса, Т. Беляев тарафынан рус телендә баҫылған һәм 1966 йылда Башҡортостандың Архангел районы Бәйес ауылында Зәкиә Ҡотләхмәтованан яҙып алынған варианттар «Тимофей Беляев версияһы» тип, ҡалған варианттар «Ғ. Сәләм версияһы» тип аталды» [Сәғитов, 1973, 11]. М. М. Сәғитов эпостың төп ике версияһынан тыш 26 вариантын күрһәтә [Сәғитов, 1973, 332–347], Ә.М. Сөләймәнов был исемлеккә өс текст өҫтәй һәм варианттар һанын 29-ға еткерә [Сөләймәнов, 2013, 59–60]. Тарих, тел һәм әҙәбиәте институты тарафынан ойошторолған фольклор экспедициялары ваҡытында тағы ла бер нисә текст өҫтәлеп, варианттар һаны 40-ҡа еткерелде [Хусаинова, Шамсутдинова, 2017, 299–301].

Һанап үтелгән барлыҡ был варианттарҙың 21-е Башҡорт теленең машина фондының фольклор корпусында урын алған [Машинный фонд башкирского языка]. Әлеге көндә унда 850000 һүҙ ҡулланыш күләмендә халыҡ ижады текстары индерелгән [Сиразитдинов, 2014, 86-89]. Электрон корпус көндән-көн тулылана бара, киләсәктә «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» эпосының архивтарҙан табылған текстары эшкәртелеп, барыһы ла корпусҡа индереләсәк. Бөтә индерелгән текстар буйынса дөйөм йышлыҡ һүҙлеген төҙөү ҙә күҙ уңында тотола.

Мәҡәләлә һүҙ Учалы районы Ҡунаҡбай урта мәктәбенең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Бүләкова Зөһрә Алсынбай ҡыҙы етәкселегендә уҡыусылар тарафынан йыйылған урындағы халыҡ ижады өлгөләре араһынан алынған вариант тураһында барасаҡ [Экспедиционные материалы-2011, 2012, 156]. Альбом Бүләкова Зөһрә Алсынбай ҡыҙында һаҡлана. Текст 1973 йылдың ноябрь айында Учалы районы Ҡунаҡбай урта мәктәбенең 8"б" класс уҡыусыһы Яруллина Рәмилә тарафынан Белорет районы Мәхмүт ауылында йәшәүсе Яруллина Таһира әбейҙән һөйләтеп алынған.

Тексты башҡа варианттар менән сағыштырғанда, иғтибарға лайыҡ айырмаларҙы күрергә мөмкин. Иң тәүҙә күҙгә ташланғаны – әҫәрҙең башламы. Ул ғәҙәттәгесә "Борон-борон заманда", тип башланмай. Күрәһең, мәктәп уҡыусыһы уны әҙәбиләштереп, хикәйәгә тартым стилдә яҙып уҡытыусыһына тапшырған. Икенсе деталь – Сарыбай хандың татар ханы тип аталыуы. Бүтән варианттарҙа күберәк Сарыбай хан – ҡаҙаҡ батыры, ә ҡайһы берҙәрендә – икеһе лә башҡорт хандары. Бында икенсе хандың яҡын күршеләрҙән булыуы информанттың хәтерендә һаҡланып, тик тап кем булыуын онотоп, татар ханы тип атауы ихтимал. Эпос персонаждарының ҡатындарының гоманлы булыуын символлаштырған образ – быуаҙ хайуан, әлеге текста ул шулай уҡ айырыла: *"ҡоралайҙы атам тигәндә, уның елененән һөт ағып китә"*. Семантикаһы оҡшаш булһа ла, һуңғы миҫал поэтик яҡтан уңышлы тойола. Йәнә иғтибарҙы йәлеп иткән бер урын – ҡыҙҙың атаһының күсеп китеүенә "*Кузыйкүрпәс һинең йәйләүеңә баш булырға уйлай*" тигән буш хәбәр сәбәпсе була, ә традиция буйынса төп сәбәп – егеттең атаһы үлгәс, ҡыҙҙың атаһы етем егетте хуш күрмәй һәм ҡыҙын уға бирмәҫ өсөн күсеп китә. Ҡуҙыйкүрпәскә әсәһенең Аҡбуҙатты алып килергә ҡушыуы, иҫермәҫ өсөн балға атының ҡылын бармағына урап болғатып эсеүе; ҡылдың берәүһен урарға онотҡанға аттың хәле бөтөүе, Ҡолтор таҙҙың ҡыуып етеп атты яралауы, егетте Ҡолтор таҙҙың ҡатыны, уның үҙен Маянһылыу сәнсеп үлтереүе; ҡәберҙән алмағас үҫеп сығып, алмаһы булыуы һәм алмаларҙан ике торна яралыуы шулай уҡ был варианттың үҙенсәлектәре булып тора.

Тексты тулыһынса биреү маҡсатҡа ярашлы һәм аталған төбәктә шул осорҙа әҫәрҙең халыҡ хәтерендә ни рәүешле һаҡланғанын күрһәтә.

Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу

Башҡорт ырыуының танылған батыры Ҡарабай менән татар батыры Сарыбай бик дуҫ инеләр. Бергә һунарға йөрөнөләр. Бер көндө һунарға сыҡҡанда, бер ҡоралай килеп сыға, улар уны атабыҙ ғына тигәндә, ҡоралайҙың елененән һөт килә башлай. Быны күргән Ҡарабай менән Сарыбай: "Бисәләр бала табырға ҡалғайны" – тип ҡыуанғандар һәм ысындан да Ҡарабайҙың улы, ә Сарыбайҙың бик сибәр ҡыҙы тыуған була. Ҡарабай улына Ҡуҙыйкүрпәс, тип, ә Сарыбай ҡыҙына Маянһылыу, тип исем ҡуштылар һәм ҡоҙа булышырға һүҙ биреп, уларҙың ҡолағын тештәтәләр. ләкин Ҡарабай күп тормай ауырып үлеп китә. Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу бик тиҙ үҫәләр. Ҡуҙыйкүрпәс бик батыр була, ул иптәштәре араһында иң көслө була, ә Маянһылыуға тиңләшерлек һылыу булмай. Сарыбайҙың яҡын кешеһе Ҡолтор башлы Ҡолтор таҙ Маянһылыуҙы үҙенә алырға уйлай. Ул Сарыбайға: "Кузыйкүрпәс һинең йәйләүеңә баш булырға уйлай" – ти, ә Сарыбай быны ишеткәс, ете диңгеҙ ете күл аръяғына күсеп китә. Ҡузыйкүрпәс быны белмәй, ә бер көндө ул бер әбейҙең берҙән-бер улын туҡмай һәм күтәреп әбейгә алып бара, әбей быны күргәс, Ҡуҙыйкүрпәсте әрләй, һүҙ араһында:

– Улай булмаһаң әйттерелгән ҡыҙыңды алып ҡалмаҫтар ине, – ти. Ҡуҙыйкүрпәс бик аптырай һәм һораштыра башлай, ә әбей уға әйтмәй, әсәһенән һорашырға ҡуша.

Ҡуҙыйкүрпәс әсәһенең әйтмәйәсәген белдергәс, әбей уға ҡурмас ҡыҙҙырттырға ҡуша. Ҡуҙыйкүрпәс ҡайткас, әсәһенә ҡурмас ҡыҙҙырырға ҡуша һәм әсәһе ҡурмас ҡыҙҙырып ҡалаҡ менән бирһә, ул ҡулына һалып биреүен һорай, ә әсәһе ҡурмасты ҡулы менән биргәс, ул уның ҡулын ҡыҫа һәм: “Әсәй, дөрөҫөн әйтсе минең әйттерелгән ҡыҙым бар инеме?” – тип һорай. Әсәһе ҡулы бешә башлағас, бөтәһен дә һөйләп бирә. Ҡуҙыйкүрпәс быны ишеткәс, Маянһылыуҙы эҙләп сығып китергә була, ә әсәһе уға Аҡбуҙатты тотоп алып китергә кәңәш бирә. Маянһылыу Ҡуҙыйкүрпәстең килерен белгән була һәм үҙҙәре туҡтаған ергә көлкүмәсе күмеп ҡалдыра. Ҡуҙыйкүрпәс Сарыбайҙың йәйләүен таба һәм эшкә урынлаша. Улар Маянһылыу менән осрашып торалар. Сарыбай йәйләүендә һабантуй ойошторола. Аҡбуҙат Ҡуҙыйкүрпәскә: “Минең өс ҡылымды ал, улар һиңә бал эсерһәләр, һин минең бер ҡылымды бармағыңа бәйлә лә, шуның менән балды болғап эс, сөнки һине улар иҫертергә тырышырҙар” – ти. Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу ошо һабантуйҙа ҡасырға уйлайҙар. Ҡуҙыйкүрпәс балды Аҡбуҙат ҡушҡанса эсә һәм бейеү башланғас бейергә сыға ла Маянһылыуға баҫа. Маянһылыу ҙа бейергә төшә. Ҡуҙыйкүрпәс бейей-бейей ҙә ҡылдарҙы өтә һәм Аҡбуҙатты саҡыра, ул тиҙ генә һикереп менә лә Маянһылыуҙы алып ҡаса, ләкин ул бармағындағы бер ҡылды яндырмаған була, шуға күрә Ҡолтор башлы Ҡолтор таҙ уларҙы ҡыуып етеп Маянһылыуҙы тартып ала ла Аҡбуҙатҡа һелтәнә. Ҡылыс Аҡбуҙаттың арҡаһын телеп ала. Аҡбуҙат Ҡуҙыйкүрпәскә “Мин суҡлы муйыл янындағы күлгә өс көн өс төн сумып торһам ғына ярам төҙәлә, ә һин мине бында көтөп ят” – ти. Ҡуҙыйкүрпәс тунға уранып ята. Шул саҡ бер һайҫҡан суҡлы муйылға килеп ултыра. Ул һайыҫҡанға Маянһылыуға хат алып барыуын һорай, ләкин һайыҫҡан уны тыңламай, ә һайыҫҡандан һуң турғай килә, ул Маянһылыуға хат алып барырға риза була. Ҡолтор башлы Ҡолтор таҙҙың бисәһе Маянһылыуҙың башын ҡарап ултырған була. Ул турғайҙы күргәс, шиккә ҡала һәм тотоп ала ла һорай башлай, ә турғай бер нәмә лә әйтмәгәс, ул уның йөнөн йолҡа. Турғай бер йөнө ҡалғас, суҡ-суҡ тип һайрап ебәрә, быны ишеткәс Ҡолтор башлы Ҡолтор таҙҙың бисәһе атҡа атланып суҡлы муйыл янына саба, ә унан алда Маянһылыуҙың ағалары барған була, ул уларға балта бирә, Маянһылыуға күҙгө бирә һәм ағалары ул күҙгөнө алып ҡайтып Маянһылыуға бирә. Маянһылыу көҙгөгә ҡараһа, ни күрһен, Ҡолтор башлы Ҡолтор таҙҙың бисәһе Ҡуҙыйкүрпәсте сәнсеп тора. Ул тиҙ генә атҡа атланып Ҡуҙыйкүрпәс ятҡан ергә саба. Барып етә лә: “Еңгә, һыу алып бирсе”, – ти. Ҡолтор башлы Ҡолтор таҙҙың бисәһе йәки еңгәһе уға алып бирәм, тип, һыуға эйелһә, Маянһылыу уға сәнсә һәм Ҡуҙыйкүрпәс янына барып үҙен-үҙе сәсә. Шул саҡ уның атаһы һәм ағалары килеп етә һәм Сарыбай үҙенең ҙур хата эшләгәнен аңлай, ләкин һуң була. Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу ҡәберенән ике алмағас сыға һәм сәскә атып, алмаһы була. Ул алманан ике торна ярала, ә еңгәһе ҡәберенән дегәнәк үҫеп сыға ла, ул дегәнәктән ҡарға ярала, торналар ҡарғаны үлтерәләр ҙә осоп китәләр.

Шулай итеп, 1973 йылда Белорет районы Мәхмүт ауылында яҙып алынған текст сюжет төҙөлөшө буйынса Ғ.Сәләм варианттарының береһе булып тора. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, текст йәнле һөйләү телендә яҙылмаған, әҙәби телгә яраҡлаштырылған. Әлбиттә, йәнле һөйләү телендә яҙып алынған булһа, тағы ла күберәк мәғлүмәткә эйә булыр, диалект һүҙҙәрҙе тикшереү өсөн дә ҡыҙыҡлы материал булып торор ине.

**Әҙәбиәт**

Беляев Т. Куз-Курпяч. Башкирская повесть, писанная на башкирском языке одним курайчем, и переведенная на российский в долинах гор Рифейских, 1809 года. Казань, 1812.

Машинный фонд башкирского языка. URL: http://mfbl2.ru (Дата обращения: 15.09.2019)

Сиразитдинов З.А., Бускунбаева Л.А., Ишмухаметова А.Ш., Ибрагимова А.Д. О создании корпуса башкирского фольклора // Урал-Алтай: через века в будущее: материалы VI Всероссийской тюркологической конференции (с международным участием). Уфа, 2014. С.86-89.

Сәғитов М.М. Был китаптағы эпик әҫәрҙәр хаҡында // Башҡорт халыҡ ижады. Эпос. Икенсе китап / Төҙ., баш һүҙ яҙыусы, аңлатмалар биреүсе Мөхтәр Сәғитов. Өфө; Башҡортостан китап нәшриәте, 1973. 5-25-се бб.

Сулейманов А.М. Сведения о версиях, вариантах башкирских кубаиров // Материалы для Досье по включению башкирских кубаиров цикла “Урал-батыр” в Список шедевров нематериального наследия человечества / под ред. Ф.Г. Хисамитдиновой, Ф.А. Надршиной. Уфа, 2013. С. 55-61.

Хусаинова Г.Р., Шамсутдинова Г.Г. Некоторые наблюдения по живому разговорному языку современных курганских башкир // Актуальные проблемы диалектологии языков народов России: Материалы XVII Всероссийской научной конференции. 2017. С. 299-301.

Экспедиционные материалы-2011: Учалинский район / Сост. Г.Р. Хусаинова, Юлдыбаева. Уфа: ИИЯЛ УНЦ РАН, 2012. 156 с.

**G. G. Shamsutdinova**

*Order of the Badge of Honour Institute of History,*
*Language and Literature UFRC Russian Academy of Sciences*
*October Avenue, 71, Ufa, 450054, Russia*
*E-mail:moon07@yandex.ru*

## A VARIANT OF THE BASHKIR FOLK EPIC «KOZYKURPESH AND MAYANHULU» RECORDED IN 1973 IN VILLAGE MAHMUT OF BELORETSK REGION (BASED ON THE MATERIALS OF FOLKLORE CORPUS OF THE BASHKIR LANGUAGE)

The article presents the literal text of the Bashkir folk epic "Kozykurpesh and Mayanhulu", recorded in 1973 by Yarullina Ramilya, a pupil of the 8th form of Kunakbaevo secondary school of Uchaly region in the village of Mahmut in Beloretsk region from Yarullina Tagira. The text is stored in the album of the former teacher of the Bashkir language and literature of Kunakbaevo secondary school of Uchaly region Bulyakova Zukhra Alsynbaevna. The album was compiled during her work at the school by the head of the folklore circle. The text is located in the Folklore Corpus of the Bashkir language.

*Keywords:* Bashkir language, folklore, epic, epic piece, spoken language, record, Kozykurpesh and Mayanhulu.

## References

Belyaev. T. Kuz-Corpyach. Bashkir story, written in the Bashkir language by one kuraychi, and translated into Russian in the valleys of the Riphean mountains, 1809. Kazan, 1812.

Machine Fund of the Bashkir Language. URL: http://mfbl2.ru (Date of access: 15.09.2019).

Sirazitdinov Z. A., Buskunbaeva L. A., Ishmukhametova A. S., Ibragimova A. D. On the creation of the Corpus of Bashkir folklore // Ural-Altai: through the centuries to the future: proceedings of the VI all-Russian Turkic conference (with international participation). Ufa, 2014. Pp. 86-89.

SagitovM. M. About epic works in this book // Bashkir folk art. Epos. The second book / Constr, introductory and explanning Muhtar Sagitov. Ufa; Bashkortostan book publishing house, 1973. 5-25 pp.

Suleymanov A.M. Data on versions, variants of Bashkir kubairs // Materials for the Dossier on inclusion of the Bashkir kubairs of the Ural-Batyr cycle in the list of masterpieces of intangible heritage of mankind / edited by F. G. Hisamitdinova, F. A. Nadrshina. Ufa, 2013. P. 55-61.

Khusainova G. R., Shamsutdinova G. G. Some observations on the living spoken language of the modern Kurgan Bashkirs // Actual problems of dialectology of the languages of the peoples of Russia: Materials of the XVII all Russian scientific conference. 2017. P. 299-301.

Expedition materials-2011: Uchaly district / Comp. G. R. Khusainova, Yuldybaeva. Ufa: IHLL USC RAS, 2012. 156 p.